# Ынйылар

*Пиши о том к чему лежит душа...*
*Акмулла*

**Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 4 (104), февраль 2018 йыл**


## Хөрмәтле коллегалар, ҡәҙерле гимназия егеттәре!

**Ысын күңелдән һеҙҙе Ватанды һаҡлаусылар көнө менән ҡотлайбыҙ!**

***Тыуған илде һаҡлау – дәүләтебеҙҙең һәр гражданының изге бурысы ул. Төрлө быуын кешеләре Рәсәй Ҡораллы Көстәренең данлыҡлы тарихы, көс-көүәте менән хаҡлы рәүештә ғорурлана.***

***Бөгөн беҙ ветерандар алдында хөрмәт менән баш эйәбеҙ. Халҡын, Тыуған илен фашизм ҡоллоғонан һаҡлап ҡалған кешеләргә мәңге рәхмәтлебеҙ. Шулай уҡ юғары профессионализм, ҡаһарманлыҡ хас булған, ил һағында торған һалдаттарыбыҙҙы ла ысын күңелдән байрам менән ҡотлайбыҙ. Барығыҙға ла бәхет, ҡоростай ныҡлы һаулыҡ теләйбеҙ, изге бурысығыҙҙы үтәгәндә тик уңыштар юлдаш булһын.***

***Егет янына***
***егет баҫһа,***
***ғәскәр була,***
***Ҡалҡан булып***
***Тыуған илен***
***һаҡлап тора.***
***Сәйфи Ҡудаш.***

## 23 февраль

23 февраль – Ватанды һаҡлаусылар көнө. 1917 йылдың 7, 8 ноябрендәге ҡораллы восстание еңгәндән һуң Совет власына эске дошмандар менән генә түгел, ә тышҡы дошмандар менән дә һуғыш алып барырға тура килә - Беренсе донъя һуғышы дауам итә һәм бәрелештәр Рәсәй территорияһында барған була. Совет хөкүмәте Германия һөжүменән һаҡланыу өсөн регуляр хәрби көстәр ойоштороу эшенә тотона. Ул саҡта Ҡыҙыл армияға һәм Ҡыҙыл флотҡа хеҙмәт итеүгә үҙ теләге менән генә саҡыралар.

15 декабрҙә үк тыныслыҡ тураһында килешеү төҙөлөүгә ҡарамаҫтан, 1918 йылдың 18 февралендә австро-герман һәм төрөк ғәскәрҙәре Рәсәйгә бәреп керә һәм Украина, Белоруссияны, Прибалтиканы баҫып ала. 21 февралдә Совет хөкүмәте халыҡҡа “Ватан ҡурҡыныс аҫтында!” тигән мөрәжәғәт менән сығыш яһай. Ә 23 февраль тик 1923 йылда ғына Ҡыҙыл армия көнөнә әүерелә. 1946 йыл ул Совет армияһы һәм Хәрби - диңгеҙ флоты көнө тип үҙгәртелә. Күсәгилешлек традицияларын һаҡлап, 1995 йылдың 10 февралендә был көн Рәсәйҙә Ватанды һаҡлаусылар көнө тип иғлан ителде.

Ватанды һаҡлау борон-борондан ир - егет эше булған. Ватан урал сиктәренән сығып, бөйөк Рәсәйгә әйләнгәс тә, башҡорт уны Ватаны тип ҡабул итеп, дошмандарға ҡаты аяуһыҙ һуғышҡан.

Французларға һәм немец фашистарына ҡаршы һуғыштар юҡҡа ғына тарихта Беренсе һәм Икенсе Бөйөк Ватан һуғышы булып ҡалмаған бит.

Изге йоланы дауам итеп, 23 февраль беҙҙең йәмғиәттә тотош ир – егеттәр байрамына әүерелде.

***Йосопова Радмила, 5-се б класы уҡыусыһы.***

### *Олатайым – ветеран!*

Олатайым – ветеран!
Һуғышта ул ҡатнашҡан.
Оло яуҙарҙы еңеп
Көмөш миҙалдар алған.
Кәрәк булһа һәр егет,
Ҡатнаша бит һуғышта.
Ҡайһы берҙәр вафат була,
Һәм мәңгегә иҫтә ҡала.
Салауат батыр һымаҡ
Бик ҡыйыуҙар егеттәр.
Илгә әгәр һуғыш килһә
Улар һаҡҡа баҫырҙар.
***Иҙиәтуллина Сулпан,***
***5 –се б класы уҡыусыһы.***




### *Ҡотлайым!*

***Атайыма ҡотлау һүҙҙәре***
Атайымды байрам менән
Ҡотларға шиғыр яҙам
Оҙон ғүмер, сәләмәтлек
Теләргә мин ашығам.
Һәм шулай ҙа,бәхет, шатлыҡ,
Уңыштар, байлыҡ, муллыҡ
Ҡалдырмаҫтар һис ҡасан да
Мин быға бик ышанам.
***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***

# Илебеҙҙе һаҡлайыҡ!

### Ҙур байрам!

Илдә еңеү, ҙур байрам.
Бөтә халыҡ шатлана.
Ҡулдарына сәскә тотҡан
Атай, әсәй һәм бала.
Кешеләрҙең күҙ йәше
Юғалтыуҙар, ҡайғылар.
Өләсәйҙәр, бабайҙар
Тып-тын ҡалып илайҙар.
***Кузина Рената,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***

### Минең атайым

Минең атай бик уңған,
Күпте күргән, күп белгән,
Һис тә ҡурҡып ҡалмаған,
Сит илдә лә ул булған.
Тыуған илде һаҡлаған.
Беҙҙең ин ҡәҙерлебеҙ,
Яратам мин бик һине
Онота күрмә мине.
***Миһранова Юлиә,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***




### Атайым

Ғорур мин был донъяла
Атайым тик булғанға.
Эй ҡыуанам, шатланам
Атайымды яратам.
Бик аҡыллы һәм көслө,
Эй, шәп минең атайым.
Шуға ла ер шарынан
Ғорурланып атлайым.
Ғаилә тормошо -Атай!
Беҙҙең ғаилә бик татыу
Атай булғанғалыр ул.
Ҡыҙыҡтарҙы күрһәтә,
Ә беҙ көләбеҙ бергә.
Атайыма ҡарайым да
Тик ҡыуанам мин уға.
Бар күңелдән ғорурланам
Шундай ғаиләм булғанға!
***Шәрифуллина Альбина,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***




### Письмо деду

Шестьдесят четвертая весна
Победы.
Шестьдесят четвертая волна
По небу
Сегодня нежно разлилась
По всей России благодать –
И я хотела бы сказать…

Здравствуй, мой дедушка, мой прадед Мусин Габсабирович. Хотя я тебя и никогда не видела, я очень тебя люблю. Я горжусь тобой, мой дедушка, твоим подвигом.

Ты пал смертью храбрых в самом конце войны в апреле 1945 года. Как ждали тебя домой твои преданная жена и трое детей, но ты к ним не смог вернуться.

Наша бабушка, которой в июле исполнится девяносто два года, до сих пор о тебе вспоминает с любовью и добротой. Она, овдовев в свои 24 года, подняла и поставила на ноги ваших троих детей.

Все эти годы она, дедушка, не забывала о тебе.
Сейчас у тебя, дедушка, уже 8 внуков и 12 правнуков. Ты очень гордился бы нами.

В каждой семье есть ценности, которые переходят из поколения в поколение. Нам же от бабушки перешли твои треугольные письма с войны.

Они не прибавили нашей семье материального достатка, но одно прикосновение к ним уже очищает душу, помогает понять, чем отличается истинная жизнь от суеты.
Моя тетя, твоя внучка, которая работает библиотекарем, оформила стенд в твою честь.

Там твои фотографии, письма с войны, нежные, полные любви и заботы, письма воина, письма защитника.

Жизнь твоя, мой дедушка, оборвалась на взлете, как и у многих десятков и сотен тысяч твоих ровесников, война не щадила ни молодых, ни старых.

Ведь вы, как сказал Ю. Фучик,
«И мертвые будете жить в частице вашего великого счастья, ведь мы вложили в него нашу жизнь…»

Спи спокойно, наш любимый дедушка. Спасибо тебе за то, что благодаря тебе мы живем на этой земле, радуемся жизни, мирному небу над головой!

Мы тебя никогда не забудем!

Твоя правнучка Лиза.

***Ким Елизавета, ученица 5 б класса.***

***Үҙ еремдә дәүләт теле – башҡорт телем,***
***Ҡотоң ҡайтһын, көсөң ташһын, даның артһын!***
***Ҡ. Аралбай.***

## *21февраль - Халыҡ-ара туған телдәр көнө.*

Тыуған телем – тыуған илгенәм
Иркәләп тә һөйөр ергенәм.
Әсәм ҡулдарының наҙы ул,
Күңелемдең шаулы яҙы ул.
Г.Котоева.

Миненсә, донъялағы иң матур, иң нәфис, иң бай, иң наҙлы тел – ул башҡорт теле! Башҡортостан тигән илдә йәшәгәс башҡорт телен үҫтереү, өйрәнеү мөһимдер, тип уйлайым. Туган телебеҙҙә сыҡкан телевизион тапшырыуҙарҙы ҡарау, радиотапшырыуҙары тыңлау ҙа күңелемә илаһи моң, дәрт өҫтәй. Әлбиттә, үҙ телен һанға һуҡмаусылар ҙа осрап китә. Балаларының туған телгә, милләткә һөйөү тәрбиәләү һәр ата-әсәнең изге бурысы икәнен онотмаһындар ине. Башҡорт милләтенән булмаһалар ҙа туған телдә бер һүҙ ҙә әйтә алмаусылар етәрлек әле.

Туған тел - кешенең фекер йөрөтөү һәләтен үҫтерә, аҡыл үҫешенә ярҙам итә. Ул баштан уҡ туған телдең бөтөн ауаздарын да үҙләштерергә тейеш. Дөрөҫ һөйләү уның һүҙ байлығын арттыра.
Һәр кеше үҙенең туған, ата-әсәһенең аҫыл телен мотлаҡ белергә, һәм әҙәбиәтте өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлергә тейеш.

Туған теленде көндәлек тормошонда, көнкүрештә генә аралашыу ҡоралы итеп ҡулланыу аҙ әле. Туған телде, бөтәһенән дә элек, яратырға кәрәк. Яратыу ғына, бәлки, етмәйҙер. Уның мөмкин тиклем бөтә закондарын белеү мотлаҡ. Яғымлы яңғыраған, иң нескә хис-тойғоларҙы ла бай биҙәкле итеп, күп яҡлы һүрәтләү сараларын ҡулланып, һынлы итеп, төрлө шарттарҙа һәм төрлө стилдәрҙә һөйләй белергә, яҙа белергә лә кәрәк.

Әсәм теле миңә сәсән теле
Унан башҡа минең халым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ.

Әсә телендә кеше илен, донья матурлығын белә башлай. Уның шул телдә фекерләү зауығы формалаша. Уй күрке тел икән – тел күрке һүҙ. Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур.

Туған тел тураһында шиғырҙар ижад итәләр, йырҙар йырлайҙар, мәкәлдәр сығаралар. Мәҫәлән: тел әсәнең теләге, тел - әсәнең балаһына иң ҡәҙерле бүләге, Туған телде ҡәҙерләгән халыҡ – ҡәҙерле булыр.

Шуның менән бергә әсә теле – халыҡ аҡылының, тойоуҙары һәм эштәренең ҡиммәтле хазинаһы. Уны өйрәнеү баланы халыҡтың бөтә рухы менән туғанлаштыра.

***Хажиева Дилә, 9 – сы в синыфы уҡыусыһы***

### *Телем*

Телем минең телкәйәм!
Берҙән берем ҡәҙерлем!
Әлегә тиклем һаҡланың
Изге башҡорт тарихын.
Өйрәттең беҙҙе һин гел дә
Хөрмәт итә белергә,
Серле асҡыстар бирҙең,
Рәхмәт әйтәбеҙ һиңә.
***Исәнгужина Лилиә,***
***8 – се а синыфы уҡыусыһы.***



### *Йәмле ҡыш*

Ялтырай ерҙә ҡарҙар.
Йылмайып та ҡарайҙар.
Ҡыҙыл битле малайҙар
Ҡар бабайҙы яһайҙар.
Урмандар һәм яландар
Ап – аҡ ҡарҙа яталар
Оло матур йылғалар
Боҙ аҫтында ағалар.
***Мөхәмәҙиева Альбина,***
***7 – се б синыфы уҡыусыһы.***

# Гимназиям тормошонан

## Йәшә һәм онотма!

15 февралдә Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыуға 20 йыл тулды. Был юбилейға беҙҙең гимназияға Афғанистан һуғышында ҡатнашыусы, интернациональ һуғышсы – Ғәҙелшин Нәфис Рәис улы килде. Ул 1980 йылда ҡыш көнө армияға саҡырылып алына. Тыуған иле саҡырыу буйынса, 620 мең Совет һалдаттары Афғанстанға китәләр. Ул да ошо һанда. Рәсәй менән Афғанстан конфликты туғыҙ йыл, бер ай һәм егерме бер көн барған.



Нәфис Рәис улына 49 йәш. Һуғыштан ҡайтыуына егерме йыл үтеп китһә лә, уның күҙ алдында үлгән дуҫтары, йәлләмәҫ, уҫал дошмандар, Афғанстандың күккә ашҡан ҙур тауҙары мәңгегә уның йөрәгендә ҡалды. Һуғыштың бөтә осорҙарын кире иҫкә төшөрөргә ҡыйын булғандыр, әммә ул үҙенең һуғышта күргән ҡурҡыныс ваҡыттарын балаларға һөйләп бирҙе. Уҡыусылар ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға ысын күңелдән яуап бирҙе. Аҙаҡтан 9-сы б синыфы малайҙары- Лотфуллин Р. һәм Ғөмәров Р. уға йыр бүләк иттеләр.

***Буранғолова Ләйсән, 9 –сы в синыфы уҡыусыһы***.

## Һылыуҡай рубрикаһы

Беҙ, ҡыҙҙар, барыбыҙ ҙа һәр ваҡыт матур булырға тырышабыҙ. Тышҡы ҡиәфәтең генә матур булмаһын, эске яҡтан да матур булырға кәрәк. Һәм шулай уҡ, сәләмәт тормош алып барыу, тыныс холоҡло булыу бик мөһим. Минең ҡағиҙәләрҙе ҡулланһан матур ҡыҙыҡай булырһың:

☺ Етешһеҙлектәрең тураһында онот. Тик яҡшы яҡтарыңды ғына уйларға тырыш.

☺ Үҙеңдең айырым стилеңде тап. Бүтәндәрҙе ҡабатлама.

☺ Ваҡытыңды файҙалы итеп үткәр. Күп уҡып, белемеңде арттырып тор.

☺ Үҙеңдә ышаныслы тойоп, гел алға ынтыл. Берәр маҡсат ҡуй ҙа һәм шуға табан бар.

☺ Алдашыу, көнләшеү кеүек сифаттарҙан ҡотолорға тырыш. Сөнки улар һине берәй ваҡыт уңайһыҙ хәлдә ҡалдырыу ихтимал.

☺ Косметиканың самаһын белеп ҡуллан. Ҡулдағы, аяҡтағы тырнаҡтарың тәртиптә булһын.

☺ Үҙең тураһында күп һөйләмә. Башҡалар һинән һорашһын. Иң яҡшыһы, үҙең уларға төрлө маҡтау һүҙҙәре, комплименттар еткер.

☺ Башҡаларҙың да фекерен тыңлай бел. Үҙеңдекен генә көсләп таҡма.

Тиҙҙән 23 февраль килеп етә. Үҙегеҙҙең иптәш–малайҙарҙы, атайҙарығыҙҙы үҙегеҙҙең матурлығығыҙ менән ҡыуандырығыҙ. Сөнки беҙ, ҡыҙҙар – гүзәл, серле, матур, яҡты күңелле, йылмайып торған ҡояш нурҙары кеүек балҡыйбыҙ был ерҙә.

***Хәйбрахманова Эльза, 9 –сы в синыфы уҡыусыһы.***

«Ынйылар»

Учредитель-Администрация МБОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебей РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор Ишмухаметов Р.Р.
Ответственная за выпуск З.Х.Ярова.
Верстка Ф. Валиахметов
А. Мухамедшин
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей,
ул. Морозова, 2, каб. №19
Телефон: 4-41-70, 3-21-12,
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МБОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 40 экз. 21.02.2009г.
10. 00 ч.